Муниципаль мәктәпкәсә белем биреү бюджет учреждениеһы

Бала үҫтереү үҙәге - «Аҡбуҙат» балалар баҡсаһы

# Әхләки тәрбиә биреүҙә әкиәттәрҙең роле

# Әхләки тәрбиә биреүҙә әкиәттәрҙең роле

Барлыҡ тәрбиә бала саҡтан килә. Бала, айырыуса, әхләки һәм кешелеклек нигеҙҙәренең мәғәнәһен аңларға тейеш. Бала шәхес итеп тәрбиәләнә, бала саҡтан уҡ хзарактер һыҙаттарын үҙләштерә, үҙ баһаһы барлыҡҡа килә, үҙенә генә ҡағылышлы донъяға ҡарашы формалаша. Бала был тормошҡа нисек ҡарай һуң: һөйөү һәм йылмайыу ашамы, баҫып алыусы һәм үҙенең ҡыҙыҡһыныуҙарынан башҡа бер нәмә менән дә ҡыҙыҡһынмаусы, ҡулланыусымы.

Тормош яйлап бала алдына ауыр һынауҙар ҡуясаҡ, ул үҙе лә һиҙмәҫтән ҙурая башлаясаҡ. Шул саҡта ул иғтибарлы, йомшаҡ күңелле, кешелекле булып ҡала алырмы? Ярлыраҡтарға, ҡарттарға, тыуғандарына ярҙам итәсәкме? Тормош ауыр саҡта башҡаларға ярҙам ҡулы һуҙырмы?

Киләсәктә лә ярҙамсыл, кешелекле, итәғәтле итеп күрер өсөн, балаға нисек итеп ярҙам итергә: торомштағы матурлыҡтарҙы күрә белергә өйрәтергә, иң яҡшы сифаттарҙы унда нисек тәрбиәләргә.

Әхләки тәрбиә биреү процессының тәүге этаптарында ғаилә, мәктәп һәм дөйөм информация биреү саралары тора. Баланың ата- әсәләре тик һеҙ генә тәүге һәм иң яҡын уҡытыусылары. Әммә хәҙерге ваҡытта балалар күберәк ваҡыттарын ата-әсәһеҙ үткәрә, сөнки ата-әсәләр хөкүмәт эштәрендә йә булмаһа, шәхси тормоштарын юлға һалалар. Шуның өсөн дә бала йыш ҡына материализм идеялары йоғонтоһо аҫтында йәшәй, уларҙың тыуған ил, тирә - йүн тураһындағы күҙаллауҙары тарая, кәмһетелә, бының менән бәйле

унын шәхси  тлаптары әхләки нормаларға тап килмәй. Ә был киләсәктә баланың үçешенә кире йоғонто яһай.

Дөйөм информация биреү сараларының роле ниндәй кимәлдә һуң?

Бик ҙур. Әммә бөгөнгө көндә телевидение һәм балалар баҡсаһы, мәктәп ваҡыт һәм күңел өсөн көрәштә баланың тәүге йәштәштәре булып ҡала. Йыш ҡына телевизорҙан күрһәткән передачаларҙатәрбиәселәр һәм ата - әсәләр өйрәткәнгә һәм баланың әхләки тәрбиәһенә, моралгә  бөтөнләй тап килмәгән нәмәләр күрһәтелә. Быларҙан сығып шуны әйтке килә тәрбиәселәргә бөгөнгө көндә бик ҙур яуаплылыҡ ята: баланың күңелендә  изгелек, ярҙамсылыҡ, ғорурлыҡ тойғоларының орлоҡтарын сәсергә, уны тулы хоҡуҡлы шәхес итеп тәрбиәләргә.

Беҙгә ярҙамға ябай ғына, борондан  әхләки тәрбиә биреү сараһы булып торған, әкиәттәр килә. Әкиәттәр матурлыҡтан айырылып тормай, күңел изгелек  сатҡылары уятыусы  эстетик тойғолар үçтереү сараһы булып тора. Бала әкиәттәр аша кешенең ҡайғыһын уртаҡлашырға,  ярҙам итергә, ҡыуаныстарына бергә ҡыуанырға өйрәнә. Бала бер үк әкиәтте бер нисә тапҡыр, хатта туғыҙ – ун тапҡыр ҙа  башынан аҙағына тиклем һөйләй ала, һәр һөйләгән һайын үҙенә ниндәйҙер асыш яһай. Әкиәттән бала бер ваҡытта ла ялҡмай, әкиәттәр баланы дәртләндерә генә.

Башҡорт халҡында элек-  электән балаларын өләсәйҙәр һөйләгән әкиәттәр аша тәрбиәләгәндәр. Кистәрен өләсәйҙәр әкиәт һөйләгән, ә әсәләре төрлө эштәр менән булған. Бала тулы гармонияла йәшәгән, улар тормош ҡулына ташланылмаған.

Әкиәт образдары – яҡтылыҡа, тереклеккә,  конкретлыҡка тәүге аҙым. Әкиәттәр аша бала тирә - йүнде  аҡылы менән генә түгел, ә күңеле менән дә танып белә.  Танып белеп кенә лә ҡалмай, төрлө үҙгәрештәргә, тормоштағы хәл – ваҡиғаларға битараф ҡалмай,  яҡшылыҡҡа һәм яманлыҡҡа үҙенең ҡараштарын да билдәләй.

Бала әкиәттәр аша дөрөçлөк һәм насарлыҡ тураһындағы тәүге күҙаллауҙар менән осраша. Баланың әхләки тәрбиәһендә әкиәттәр бик ҙур

урын алып тора. Бала сағыу образдарҙа бирелгән идеяны ғына тулыһынса аңлай ала.

Әкиәт- бер ниндәй сара  менән дә алыштырмаҫлыҡ тәрбиә усағы. Әкиәттәр аша балала тыуған илгә һөйөү тәрбиәләйбеҙ. Халыҡ уйлап сығарған экиәттәрҙең нигеҙендә патриотик идея ята. Әкиәттәрҙәге образдар меңәр йылдар аша үтеп беҙҙең тормошобоҙҙа ла бик ҙур урын алып тора, шул уҡ ваҡыта баланың кескәй йөрәгенә , күңеленә үтеп инеп халҡыбыҙҙың ижади һәләттәрен, тормошҡа ҡараштарын, ынтылыштарын, идеалдарын билдәләргә ярҙам итә. Әкиәттәр балала тыуған ергә һөйөү тәрбиәләүҙәр – улар халҡыбыҙҙың ижады. Халыҡ ижад иткән экиәттәр баланың ғына түгел өлкәндәрҙең дә күңеленә үтеп инә, боронғо халҡыбыҙҙың бер ижад саҡкыһы булып ҡала.

Әкиәттәрҙе ң төрҙәре лә бик күп: батырлыҡ тураһындағы экиәттәр, хеҙмәт менән бәйле экиәттәр, һуғыш тураһындағы экиәттәр. Былар барыһы ла балала иң изге тойғолар уята, яҡшылыҡҡа, тыныслыҡҡа өндәйҙәр. һәр экиәттең үҙ мәғәнәһе лә бар. Әкиәттәрҙең һәр һүҙе үлемһеҙ, быуындар аша быуынға күсә килә.

Хөрмәтле ата- әсәләр, балаларығыҙҙы экиә!ттәрҙән, өләсәләренең һабаҡтарынан айырмағыҙ.  Бергәләшептулы хоҡуҡлы, изге йәнле шәхестәр тәрбиәләйек.